# **Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында илебеҙҙе данлаған яҡташтарыбыҙ**



*Дим Ҡотдос улы Ишбулатов оҙаҡ йылдар Дыуан-Мәсетле урта мәктәбендә тарих фәнен уҡытҡан ветеран уҡытыусы. 2004-2006 йылдарҙа мәктәп музейын етәкләне, уны аяҡҡа баҫтырыуҙа күп көс һалды.*

Беҙҙең Мәсетле районынан һуғышҡа 5387 кеше алына.

Ошо иҫәптән 2197 кеше һуғыш яланында ятып ҡала, 1759 һалдат хәбәрһеҙ юғала, 700-ҙән ашыу кеше яралана, 360 фронтовик ғәрип булып ҡайта. 2580 яугир орден һәм миҙалдар менән бүләкләнә.

Тылда эшләгән 2447яҡташыбыҙ «1941-1945 йылдарҙа Бөйөк Ватан һуғышыындағы физәкәр хеҙмәте өсөн» миҙалына лайыҡ була. Күп ҡатын-ҡыҙҙар колхоз рәйестәре, бригадирҙар, тимерселәр, шоферҙар, тракторсылар булып эшләргә мәжбүр булалар.

Мәҫәлән «Серп и Молот» колхозы рәйесе – Топычканова, бригадирҙар Чистякова, Дмитриева, Сычкина, Крючкова, Михайлова, Ғатауллина, «Йондоҙ» колхозында тракторсы Кәримә Ғималова (Ҡотош ауылы).

Беҙҙең Дыуан-Мәсетле ауыл советына ҡараған ауылдарҙа ла түбәндәге апайҙар механизатор һөнәрен үҙләштерҙеләр. Мәҫәлән: Дыуан-Мәсетле ауылынан

Фәхретдинова Мөкәрәмә шофер булып эшләй һәм 1945 йылда япон самурайҙарына ҡаршы һуғышта ҡатнашырға ла өлгөрә. Ул 2006 йылдың 18-се февралендә 93 йәшендә вафат булды.

Ошо уҡ ауылдан Ғилметдинова Хәмиҙә лә тракторсы булып алды-ялды белмәй эшләй.

Бурансынан тракторсы Ғәлимова Миңлегөл, Туҡбайҙан Вәлиуллина Зәйтүнә, Мөхәмәтшина Фәхринур, Ғәлләмова Әминә апайҙар, Ҡаранайҙан Әхмәтшина Ғилми, Абдрахманова Минзифа, Мөхәмәтйәнова Биби тылда Еңеү таңын яҡынайтыуҙа күп көс һалдылар.

Беҙҙең Дыуан-Мәсетле ауылынан 5 ҡатын-ҡыҙ фронтта булғандар. Фәхретдинова Мөкәрәмә, Хәтмуллина Закира, Кәбирова Әминә, Байназарова Фәрзәнә һәм Бакал ҡалаһында йәшәүсе Әхмәтшина Сания апайҙар.

Дөйөм алғанда, әлегә тиклем Дыуан-Мәсетле ауыл советынан 370 кеше һуғышта ҡатнашҡан тип иҫәпләнде, ә инде Бөйөк Еңеүҙең 60 йыллығына бәйле эҙләнеүҙәр, оло кешеләр менән һөйләшеү юлы менән беҙ уларҙың 405 кеше икәнлеген асыҡлай алдыҡ. Бөгөнгө көндә һәр ауыл һайын һуғышта һәләк булғандарҙың һәм һуғыштан һуң үлеп ҡалған яугирҙәрҙең теүәл исемлеге алынған. Ваҡыт үҙенекен итә... Бөгөн ауыл советына ҡараған ауылдарҙа бик аҙ ғына фронтовик иҫән.

Беҙҙең бурыс – беҙҙе фашизм ҡоллоғонан ҡотҡарып алып ҡалған ҡаһарман яугирҙәрҙең исемен мәңгеләштереү һәм иҫән булған фронтовиктарҙы, тыл хеҙмәткәрҙәрен хөрмәтләү һәм уларға төрлө яҡлап ярҙам итеү.

*Д.Ҡ. Ишбулатов*